*Мирас ИҘЕЛБАЕВ*

# аҙтуған

Ҡаҙтуған йырауҙың тормош юлы ла, ижады ла бик аҙ билдәле. Ҡаҙаҡтарҙа, ҡараҡалпаҡтарҙа ул Ҡаҙтуған Сүйениш улы тигән исем менән йөрөй. К.Мәмбәтов мәғлүмәттәре буйынса, Ҡаҙтуған XV быуат урталарында Волганың түбән яғында, Актүбәнән көнбайышта ятҡан Ҡыҙыл яр тигән ерҙә тыуған, нуғайҙың («ун һан нуғайлыларҙың») Ҡара Ҡыпсаҡ ырыуынан. Ата-бабалары батыр булған. Тарихи сығанаҡтарҙа Ҡаҙтуғандың үҙе лә «батыр» һәм «шағир» тип атала. Ҡаҙаҡ Х.Суйыншалиев та Ҡаҙтуғандың тыуған ере тип шул уҡ урынды күрһәтә, күскенселәрҙең «ғәскәри аристократияһынан» сыҡҡан: халыҡ легендаларына ҡарағанда, көрәшсе, яугир, батыр йырау булған, ти ул. Ә бына Ҡаҙағстан Фәндәр академияһының Үҙәк ғилми китапханаһындағы ҡулъяҙмаларҙың береһе буйынса — «Қазтуғанның туып-өскен конысы — Жайықтың күнбатыс бетіндегі Нарын, Қабаршақты, Қарасу жерлері» яҡынса шул уҡ төбәк. Бында ла йырауҙың батырлығы, ғәскәр башлығы булғанлығы һыҙыҡ өҫтөнә алына; кәүҙәһенең тәпәшлеге арҡаһында «ҡарға буйлы» тип аталған икәнлеге әйтелә. М.Магауин Ҡаҙтуғанды Ахтүбә һәм Бузан йылғалары буйында йәшәгән төрки ҡәбиләләренең ырыу башлығы булыуы, XV быуаттың икенсе яртыһында ҡул аҫтындағы ырыуы менән бергә тыуған яҡтарынан ситкә китеп, ҡаҙаҡ ханлығы эсенә инеүе тураһында яҙа. Тыуған, үлгән йылдары билдәһеҙ.

«Яугир» һәм «шағир» тигән һүҙҙәр ирекһеҙҙән Салауатты иҫкә төшөрә. Ҡаҙтуғандың үтә наҡыҫ ижади мираҫына күҙ һалайыҡ әле, шиғри күңелле яугир Салауаттан өс быуат элек ниндәй рухта ижад итте икән?

Беҙҙә Ҡаҙтуғандың бер генә тексы («Ялан да ялан, ялан йорт») донъя күрҙе. Уны Ғ.Хөсәйенов башҡорт ҡобайырына яҡынлығы принцибы буйынса һайлап алған, күрәһең.

Иркенләп һайларлығы ла юҡ шул. Ҡаҙаҡтарҙа һәм ҡараҡалпаҡтарҙа ла XIX быуат башынан бирле уның өс кенә импровизацияһы баҫыла килгән. Тырышҡанда, шуларҙан сығып та йырауҙың ижады йөҙөн, шәхсән үҙенсәлеген яҡынса төҫмөрләргә була. Иң алда күҙгә ташланғаны — Ҡаҙтуғандың «мин»лек тойғоһо, кешелек, шәхеслек, авторлыҡ бәҫе. Ауыҙ-тел әҙәбиәтендә ни бары 70-ләп кенә юллыҡ әҫәрҙәрендә үҙенең авторлыҡ үҙаңын шулай үткер ҡуйған ҡабатланмаҫ осраҡтыр был. Уйлап ҡараһаң — тәбиғи. Ғәскәр башлығы, ырыу юлбашсыһы үҙенең ижтимағи тормошта тотҡан урынын бик һәйбәт аңлап, ихтыярҙан тыш ижадында ла сағылдырған булып сыға. Уны шулай етәксе рухлы итеп тәрбиәләүҙә ата-әсәһенең дә роле барлығын онотмай йырау; ғорурланып, хөрмәтләп, иң мөһиме — тыуған ер менән бергә ҡушып телгә ала:

Ялан да ялан, ялан йорт,
Аҡыл урҙам ҡунған йорт,
Атам беҙҙең Һөйөнөс
Кейәү булып барған йорт,
Анам беҙҙең Буҙтуған
Килен булып төшкән йорт.

Күрәһегеҙ, был юлдар «Иҙел йорт» исемле башҡорт ҡобайырындағы һәр беребеҙҙең күңеленә бала саҡтан һеңеп ҡалған «Әсәм килен булған йорт, атам кейәү булған йорт...» кеүек һүҙҙәргә ифрат ауаздаш.

Ирония ҡатыш бәҫлек тойғоһо менән автор үҙен дә шунда ҡыҫтырып ебәрә:

Ҡарғадай мынау Ҡаҙтуған
Батыр болып туған йорт.[1]

Ҡаҙтуғандың билдәһеҙ күләмдәге ижадынан ни бары өс кенә шиғыры эсендә ниндәйҙер поэтик фекерҙәре килеп еткән икән, беҙ уларҙы иң кәрәклеләре, оҙайлы дәүер йәшәй торғандары, хазинаға бәрәбәрҙәре тип ҡабул итә алабыҙ. Шул һанаулы ғына «фекер бөртөктәренән» йыраущың ижади портретын сыймаҡларға баҙнат ҡылабыҙ. Уйлап ҡараһаң, әлеге өс шиғыр уның өс һыҙатын үҙҙәре үк сыймаҡлап бирә. Шиғырҙарҙың береһе тотош Ҡаҙтуғандың үҙе хаҡында ғына. Моғайын, бүтән берәү ҙә уға шулай аныҡ, тапҡыр характеристика бирә алмаҫ ине. Ни бары 17 генә юлда йыраущың — йыраулыҡ, яугирҙың — яугирлыҡ, юлбашсының — юлбашсылыҡ сифаттары асыла; ошо өс сифатты бергә туплаған кешенең портретына, ҡиәфәтенә тиклем бирелә:

Будырайған екі шекелі,
Моздай үлкен көбелі
Ҡоры унымы султандайын
жүрісті.

Ә йырау булараҡ, һүҙе менән («сөйләсе ҡызыл тілдің шешені») уҫал, ҡарышма аттарҙы тотоп туҡтатыр, бөтә урҙаны ҡулында тота («тотор» түгел)! Ғөмүмән, үҙ замандаштары араһынан һис кемгә оҡшамаған, үҙенә башҡа айырылып торған кеше ул:

Мусылман мен кәуірдің
Арасын өтіп бузып дінді ашҡан
Суйінішулы Ҡаҙтуған!

Икенсе шиғыры — яугирлыҡ хаҡында. Йырау, әйтерһең, яу атрибуттарын ғына һайлап алып, шуларға характеристика бирә: дошман ҡанын көйҙөргән ҡылыс («балдағы алтын күреш болат ашылып исапсам дем тартар, сусыным ҡанға ҡанар деп»); арыу белмәҫ ат («арғымаҡтың баласы арыған сайын тиң жортар»); илен һаҡларға әҙер торған гәйрәтле ир-егет («Азамат ердің баласы жабыҡҡанын білдірмес, жамандар мазак ҡылар деп»).

Ә яугир ни өсөн ҡулына ҡорал ала? Әлбиттә, тыуған тупраҡҡа дошман аяғы баҫыр ҡурҡыныс тыуғанда. Тыуған ерен батырҙан да нығыраҡ яратаҡан кеше юҡтыр, бәлки? Батыр ҙа, йырау ҙа исеме менән дан алған Ҡаҙтуғандың өсөнсө әҫәре тыуған ерҙең хозур тәбиғәтен тасуирлай. Ифрат беҙҙең Урал, Иҙел яҡтарына оҡшаған икән уның тыуған төбәге. Ҡаҙтуған был яҡтарҙы үҙ күҙҙәре менән күргәнме, әллә уның шиғри тауышы беҙҙең тарафтарға ла килеп ишетелеп, башҡорт ҡобайырҙары моңона ҡушылып киткәнме?

Ябағалы йәш тайлаҡ
Ярҙай аҫау булған ер,
Ятып ҡалған бер бәрәс
Йәйелеп мең ҡуй булған ер.

Ботадағы быҙауҙай,
Буҙ ҡаҙағы бәрәстәй,
Балығы тайҙай тулаған,
Баҡаһы ҡуйҙай һулаған...[2]

[1] Ертедегі ҡазаҡ әдебиеті хрестоматиясы. — Алматы: Мәктәп, 1967. — 102-103-сө биттәр. Ҡаҙтуғандың ҡаҙаҡ телендәге импровизацияларынан өҙөктәр бөтәһе лә ошо сығанаҡтан алынды.

[2] Ошоға ауаздаш юлдар «Ай, Уралым, Уралым» ҡобайырында бар.